# Совет ғәскәрҙәрен Афғанстандан сығарылыуына

# 30 йыл

- Быйыл Рәсәйҙә Афғанстандан совет ғәскәрҙәрен сығарыуҙың 30 йыллығын билдәләйҙәр. Бик күп ғаиләләргә ҡағылған был ҡоралльы конфликтта илебеҙ 14 мең һалдат һәм офицерын юғалтты. Өҫтәүенә, тиҫтәләгән мең йәш егеттәрҙең ғүмерен аҫтын-өҫкә килтерҙе.
- Совет ғәскәрҙәрен Афғанстанға индереү сәбәбе булып 1979 йылдың 8 октябрендә Афғанстандың Халыҡ-демократик партияһына нигеҙ һалыусы Нур Мөхәммәд Тараkиҙы үлтереү хеҙмәт итте. 1979 йылдың 12 декабрендә КПСС Үҙәк Комитеты Политбюроһы рәсми рәүештә Афғанстанға ғәскәр индереү һәм Советтар Союзы тарафынан был дәүләткә хәрби ярҙам күрһәтеү тураһында ҡарар ҡабул итә. Тәүге совет частары Афғанстанға 1979 йылдың 25 декабрендә генерал-лейтенант Юрий Тухаринов командованиеһындағы 40-сы армия составында индерелә.

- Хәрби хәрәкәттәр барышында контрреволюцион түңкәрелеш һөҙөмтәһендә Афғанстан башлығы вазифаһын биләп алған Афған оппозицияһы башлығы Хафизулла Әминде алып ташлау буйынса операция үткәреләә. Бабрак Кармаль етәкселегендә сираттағы власть алмашҡандан һуң Афғанстанда урынлаштырылған режим тулыһынса совет хәрби, техник һәм финанс ярҙамына бәйле була. Шул уҡ ваҡытта баш күтәреүселәр төркөмдәренә АҠШ яғынан ярҙам күрһәтелә.
- 1986 йылда Афғанстанда сираттағы дәүләт түңкәрелеше була, уның һөҙөмтәһендә властан алынған Бабрак Кармаль урынын Афғанстан президенты итеп һайланған Мөхәммәд Наджибулла биләй.

- 1988 йылда СССР һәм АҠШ властары Афғанстандың эске эштәренә ҡыҫылмау тураһында һөйләшеп килешә. 1988 йылдың майында совет ғәскәрҙәрен Афғанстандан сығарыу башлана, ул 1989 йылдың 15 февралендә тамамлана.
- Афған һуғышы беҙҙең республикабыҙ өсөн дә эҙһеҙ үтмәй. Унда Башҡортостандан туғыҙ мең ярымдан ашыу кеше ҡатнаша. Шуларҙан 343-ө яу яланынан әйләнеп ҡайтмай.
- Традицион рәүештә 15 февраль көнө – ул һәләк булыусыларҙы хәтергә алыу ғына түгел, иҫән-һау әйләнеп ҡайтыусыларға тәрән ихтирам һәм рәхмәт белдереү ҙә.

# Әюпов Рәшит Фәхритдин улы




10 октябрең 1966 йылында Бөрйән районы Байназар ауылында доньяға килгән. 1974 йылда Байназар мәктәбенә уҡырға инә. 1984 йылда Байназар мәктәбенең 10-сы синыфын тамамлай һәм шул уҡ йылдың 29 октябрендә хеҙмәт сафына алына. Тәуҙә Анапала учебкала 6 ай булып, Термез ҡалаһына(Афғанстанға) ебәрелә. Өлкән матрос, гаранатометчик булып хеҙмәт итә. Ике йыл ярым хеҙмәт иткәндән һуң, 1987 йылдың 23 ноябрендә Тыуған яҡтарын ҡайта. Яҡшы хеҙмәте өсөн «Отличник Погранвойск 1-ой степени», «Отличник Погранвойск 2-ой степени», «70 лет Воруженных сил СССР» миҙалдары менән наградлана.

Нәзифә Ғилфан ҡыҙы менән матур тормош көтөп, өс ул өс ҡыҙ уҫтерәләр.

# Алтынбаев Сәғит Ғизитдин улы



1965 йылдың 19 августында Алтынбаев Гизитдин Ғибәт улы һәм Шәмсинур Муса ҡыҙының ғаиләһендә донъяға килгән. 1972 йылда Байназар урта мәктәбенә уҡырға барып 1982 йылда уңышлы тамамлаған. Өлгөргәнлек аттестаты менән бергә тракторист танытмаһын да ҡулына алып Ағиҙел колхозына эшкә урынлаша. Унда бер йыл эшләгәндән һуң, ДОСАФ –та уҡып шофер танытмаһын ала. 1983 йылдың 28 сентяберендә махсус саҡырыу буйынса Совет Армияһы сафына хеҙмәткә алына. Байназар ауылынан бергә Алтынбаев Ришат Ғәле улы һәм Карагулов Фәйзи Спартак улы менән бергә саҡырталар. Улар бер ауылдан ғына тугел, ә бер синыфташтар ҙа, ДОСАФ-та лә бергә белем алалар. Өфөнән Ростов өлкәһе, Новочеркеск ҡалаһына алып киләләр.



Ике ай ярым хәрби курстар уткәс  Афғанстанға ебәреләләр. Сәғит Ғизитдин улы мотоуҡсылар полкында хеҙмәт итә. 5 ай миномет ярҙамсыһы булып йөрөгәндән һуң өр-яңы ГАЗ-66 машинаһын ышанып тапшыралар. Яраланып госпиталдә ятып та сығырға тура килә. 2 йыл ярымдан һуң Тыуған яғына ҡайтып етә.




Хәҙерге ваҡытта ҡатыны Резеда менән ике бала - улы Сынбулат, ҡыҙы Айгөлдө үҫтереп матур итеп донья көтәләр. Байназар ауыл мәҙәнийәт йорто директоры, Ветерандар Советы ағзаһы.

Армия сафында яҡшы хеҙмәте өсөн:

- «СССР-ҙың юғары Совет Президиумының батырлыҡ өсөн маҡтау ҡағыҙы»
- «Хәрби хеҙмәттәге ҡаҙаныштары өсөн»миҙалы
- «70 лет советских Вооруженных сил СССР»-юбилей миҙалы
- «От благодарного Афганского народа» миҙалдары менән наградлана.

# Зайнуллин Хәмит Әхмәт улы



26 февраленең 1964 йылында Бөрйән районы Байназар ауылында доньяға килгән. 1971 йылда Байназар урта мәктәбенә уҡырға бара.1981 йылда 10-сы синыфты тамамлап, Ағиҙел колхозына төрлө эштәрҙә эшләй.

1982 йылдың 8 майында Совет Армия сафына алына . Тәуҙә Куйбышыв ҡалаһында, шунан Ашхабадҡа кусерәләр. Унда присяга ҡабул иткәс, ай ярымдан Афғанстанға ебәрелә.1984 йылдың 16 июлендә Ил алдындағы бурысын утәп , Тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайта һәм колхозда эшен дауам итә. 2008 йылдан Курғашлы ауылындағы “ Сулпан” балалар приютында эшләй, приют ябылғас төрлө эштәргә күсә. Өйләнгән. Өлгөлө атай- ҡатыны Василя менән ике ул һәм бер ҡыҙ уҫтерәләр.

Армия сафында яҡшы хеҙмәте өсөн «Отличник Советской Армии», «70 лет Воруженных сил СССР» миҙалдары һәм «СССР-ҙың юғары Совет Президиумының батырлыҡ өсөн маҡтау ҡағыҙы»менән наградлана.

# Газин Хәбир Нәҙир улы



- 1969 йылдың 20 апрелендә Бөрйән районы Ҡурғашлы ауылында тыуған.
- 1976 йылда Байназар урта мәктәбенә уҡырға бара.
- 1986 йылда 10-сы синыфты тамамлап, Белорет ҡалаһында ДОСАФ- та уҡып шофер танытмаһын ала.
- 1987 йылдың 2 майында Совет Армия сафына алына. Батуми ҡалаһында 5 ай хәрби курстарҙы утә. Шунан Афғанстанға ебәрелә. Афғаностанда БТР ҙа механик- водитель булып хеҙмәт итә. Ул совет һәм афған генералдарын йөрөтә. Бер хәрби ваҡиғалар барышында Хәбир йөрөткән хәрби машинаға дошмандар гранатометтан ата башлайҙар, бер граната машинаға тура килеп шартлауы совет генералын ауыр ралай, афған генералы шунда уҡ йән бирә. БТР эштән сыға. Көслө шартлауҙан экипаж контузия ала. Хәрби машинаны уҙ ҡулына алып Хазин Хәбир Нәҙир улы уҙенең генералын ҡоткарырға өлгәшә.
- Ошо батырлыҡтары  һәм хәрби таҫыллығы өсөн уны юғары наградаға дәкдим итәләр- “Кыҙыл йондоҙ” ордены менән буләкләнә.
- Ә бына “Хәрби хеҙмәттә ҡаҙаныштары өсөн” тигән медаль менән икенсе тапҡыр дошмандар алып ҡасҡан БТР ҙы кире ҡайтарған өсөн буләкләйҙәр.
- 1989 йылдың  майында хеҙмәтен тултырып ҡайта.
- Армия сафында яҡшы хеҙмәте өсөн  «Ҡыҙыл йондоҙ»ордены, «За боевые заслуги », «За Отличие в воинской службе» миҙалдары һәм «СССР-ҙың юғары Совет Президиумының батырлыҡ өсөн маҡтау ҡағыҙы»менән  наградлана. Ҡатыны Гөлнара менән 3 ул үҫтерәләр.



Сәйәхов Фәнис Мотаһар улы - 1968 йылдың 11 декабрендә Бөрйән районы Мәһәҙей ауылында тыуған. 1976 йылда 1 класҡа уҡырға бара. 1979-1986 йылдарҙа Байназар мәктәбендә уҡый. Мәктәпте уңышлы тамамлағандан һуң «Ағиҙел» колхозында комбайнер булып эшләй. 1986 йылдың көҙөндә военкомат йүнәлтмәһе буйынса Белорет ДОСААФына ебәрелә, водитель профессияһы алып сыға.

1987 йылдың 2 майында Совет Армияһы сафына алына. Батуми ҡалаһына учебкаға әлгә, 5 айлыҡ әҙерлек үткәндән һуң Афғанстанға Баграм ҡалаһына ебәрелә. Афғанстан республикаһынан Совет ғәскәрҙәрен сығарышыуҙа ҡатнаша. 1989 йылдың февралендә улар хеҙмәт иткән полк иң һуңғыларҙан булып Афғанстандан сыға. Хеҙмәтен 1989 йылдың яҙында Әзербайжан республикаһының Кировобад ҡалаһында тамамлай.

Яҡшы хеҙмәте өсөн «За отвагу», «От благодарного Афганского народа» миҙалдары менән наградлана.

Әлеге көндә Мәһәҙей ауылында йәшәй.

# Тулыбаев Ғафүр Әдиғәм улы



1964 йылдың 12 февралендә Мораҙым ауылында донъяға килгән.
Хәрби хеҙмәтте Афғанстан демократик республикаһында үткән.
Әлеге ваҡытта ҡатыны Нурсилә менән ике ул ике ҡыҙ үҫтереп Байназар ауылында йәшәйҙәр.

# Мөхәмәтйәнов Юнир Кәшбитдин улы



1964 йылдың 13 мартында Мораҙым ауылында доньяға килгән.
11 класты уңышлы тамамлағас 1982 йылдың 8 апрелендә хәрби хеҙмәткә саҡыртыла. Ил адындағы хәрби бурысын Афғанстан ерендә хеҙмәт итеп, утәп1984 йылдың июлендә Тыуған яғына әйләнеп ҡайта. Өйләнгән. Ҡатыны Рашиҙә менән алты бала уҙтереп Мораҙым ауылында йәшәйҙәр.

Хәрби хеҙмәттә уңышлыҡтары өсөн «От благодарного Афганского народа» миҙалы менән наградланған.

# Тажитов Афзал Бейеш улы



15 апрелдең 1970 йылында Бөрйән районы Байназар ауылында тыуған. 1988 йылдың 13 майынан-1990 йылдың 23 майына тиклем Совет Армияһы сафында хеҙмәт итә. Үҙенең бурысын Афғанстан республикаһында утәп ҡайта. Өйләнгән. Өс ул һәм бер ҡыҙ уҫтерә.

Яҡшы хеҙмәте өсөн «От благодарного Афганского народа» миҙалдары һәм«СССР-ҙың юғары Совет Президиумының батырлыҡ өсөн маҡтау ҡағыҙы » менән наградлана.

# Асылбаев Радик Заһретдин улы



1968 йылдың 1 июлендә Яумбай ауылында тыуған.
1985 йылда мәктәпте уңышлы тамамлағас бер йыл Ағиҙел колхозында эшләй.
1986 йылдың нояберендә Совет армияһы сафына алына.
«От благодарного Афганского народа» миҙалы менән, «СССР-ҙың юғары Совет Президиумы батырлыҡ өсөн маҡтау ҡағыҙы» менән наградланған

# Утәбаев Таһир Йәнғәле улы



1963 йылдың 12 апрелендә Моразым ауылында доньяға килгән. 10 синыфты уңышлы тамамлағас, 1981йылдың октябрь айында хәрби хеҙмәткә алына. Ил алдындағы хәрби бурысын Афғанстанда , водитель – механик БМП булып утә . 1983 йылдың май айында хеҙмәтен тултырып Тыуған яҡтарына кайта. Әлеге ваҡытта ҡатыны Земфира менән бер ул бер ҡыҙ уҫтереп Моразым ауылында йәшәйҙәр. Хәрби хеҙмәттә « За отвагу» миҙалы менән наградланған.

# Салауатов Фаяз Нурмөхәмәт улы

1968 йылдың 2 мартында Байназар ауылында доньяға килә. Өйләнмәгән. Әлеге ваҡытта Байназар ауылында йәшәй.

СССР-ҙың юғары Совет Президиумы батырлыҡ өсөн маҡтау ҡағыҙы»менән наградланған.

# Карағолов Зәйтун Кәбир улы (мәрхүм)



1966 йылдың 25 июлендә Байназар ауылында доньяға килә.

Өс улы бар. Денис - 31/08/1989 йылғы, Алмаз -28/09/98 йылғы. Инсаф - 11/10/1999 йылғы.

# Байназаров Фәүзи Заһретдин улы



СВИДЕТЕЛЬСТВО



РЕСПУБЛИКА АФГАНИСТАН

В соответствии с Указом Президента Республики Афганистан от 15 мая 1988 г. награжден медалью „ВОИНУ-ИНТЕРНАЦИОНАЛИСТУ ОТ БЛАГОДАРНОГО АФГАНСКОГО НАРОДА“

Фамилия Байназаров

Имя Фаузи

Отчество Загретдинович

№ 240

Дата 15 мая 1988 г.

1961йылдың 19 октяберендә Яумбай ауылында доньяға килгән.

11 класты уңышлы тамамлағас, 1980 йылдың 28 октяберендә хәрби хеҙмәткә саҡырталар.

1982 йылдың 27 сентяберенә тиклем хәрби бурысын отделение командиры булып Афғанстан илендә тамамлап ҡайта. Әлеге ваҡытта Яумбай ауылында йәшәй.

Хәрби хеҙмәтен баһалап уны

«От благодарного Афганского народа» миҙалы менән,

«СССР-ҙың юғары Совет Президиумы батырлыҡ өсөн маҡтау ҡағыҙы»менән наградлағандар




# Караголов Фәйзи Спартак улы (мәрхум)

13 август 1965 йылда Байназар ауылында доньяға килгән.1972 йылда Байназар мәктәбенә уҡырға бара. 1982 йылда 10 синыфты тамамлағас, ошо йылда уҡ Белорет ДОСАФ-ында уҡып водитель танытмаһын ала. Хәрби хеҙмәткә 1983 йылдың май айында алынынып Афғанстанға ебәрелә.1985 йылдың май айында хеҙмәтен тултырып ауылға ҡайта һәм «Сельхозхимияға» эшкә урынлаша. 1987 йылдың 18 февралендә Аҙанғолова Светлана Мәхмут ҡыҙы менән сәстәрен сәскә бәйләйҙәр. Ҡыҙҙары Эльвира һәм улдары Айнур тыуа. Әммә ике балаһын атайһыҙ, ҡатынын тол ҡалдырып 31 август 1992 йылда мәрхум була

Армия сафында яҡшы хеҙмәте өсөн «От благодарного Афганского народа»миҙалы менән һәм «70 лет вооруженных сил СССР» миҙалдары менән, «СССР-ҙың юғары Совет Президиумының батырлыҡ өсөн маҡтау ҡағыҙы » менән наградланған.




# Алтынбаев Ришат Ғәле улы(мәрхум)








1965 йылдың 15 июнендә доньяға килә. Хәрби хеҙмәтте Афғанстанда 1984-1986 йылдарҙа утәп ҡайта. 1997 йылдың1 июнендә мәрхум була.

Армия сафында яҡшы хеҙмәте өсөн тубәндәге миҙалдар менән наградлана.

«70 лет советских Вооруженных сил СССР.»

«От благодарного Афганского народа.»

# Байназаров Рамзис Ғайфулла улы (мәрхум)



1967 йылдың 8 июнендә Бөрйән районы Байназар ауылында доньяға килгән. 1977 йылда Байназар мәктәбенә уҡырға бара. 1984 йылда 10 синыфты тамамлағас, Ағиҙел колхозында төрлө эштәрҙә йөрөй. Бер йылдан хәрби хеҙмәткә алалар. Самарканд ҡалаһында 6 ай хәрби уҡыуҙа була (учебкала) унан һуң тағы бәйләнеш буйынса белгес (связист) итеп әҙерләйҙәр һәм Афғанстанға ебәрелә. Ошо уҡыған профессияһы буйынса хеҙмәт итә. 1987 йылда хеҙмәтен тултырып ауылға ҡайта. Ошо йылда уҡ Белорет ДОСАФ-ында уҡып водитель танытмаһын алып Сельхозхимияла 3 йыл эшләй. 23 ноябрь 2013 йылда мәрхум була

Яҡшы хеҙмәте өсөн «От благодарного Афганского народа»миҙалы менән һәм «70 лет вооруженных сил СССР» миҙалдары менән наградлана.

# Зайнуллин Ғәлим Әхмәҙийә улы (мәрхум)



1968 йылдың 5 сентябрендә доньяға килгән. 1986-1989 йылдарҙа хәрби бурысын Афғанстан ерендә утә. Өйләнгән. Ҡыҙғанысҡа, ике улын ҡыҙын атайһыҙ ҡалдырып 2007 йылдың 22 майында мәрхум була.

Хәрби хеҙмәтен баһалап уны «От благодарного Афганского народа» миҙалы менән, «СССР-ҙың юғары Совет Президиумы батырлыҡ өсөн маҡтау ҡағыҙы»менән наградлағандар.

# Газин Венер Нәҙир улы (мәрхүм)





# Әминев Зәйтүн Зәйнетдин улы (мәрхүм)



Әминев Зәйтүн Зәйнетдин улы Бөрйән районы Байназар ауылында 1965 йылдын 25 октябрендә доъяға килгән. 8 класты тамамлағас Таштимер ауыл хужалығы Һөнәрселек училищеһында уҡый. 1984 йылдын көҙөндә хәрби хеҙмәткә алына, Туркмениянын Иолотань калаһында учебка ла була, шунан Афғанстанға оҙаталар.



- Ул Шиндант, Кандагар тиган урындарҙа хеҙмәтен дауам итә. Заряжающий САУ булып хеҙмәт иткән. 1986 йылдын март айында харби хеҙмәтен тултырып тыуған ауылына ҡайта. Өйланмаган. 2005 йылда мәрхүм булып ҡала.





«Ҡайғылы әсә» мемориалы (Өфө)